Муниципаль район Баймаҡ районы һәм ҡалаһы Хакимиәтенең мәғариф бүлеге муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы
1 –се Эткол ауылының Б. Юлыев исемендәге урта дөйөм белем биреү мәктәбенең филиалы Ҡаратал ауылының мәктәпкәсә белем биреү төркөмө

Отдел образования Администрации муниципального района Баймакский район
и г. Баймак группа дошкольного образования д. Каратал
филиал муниципального общеобразовательного бюджетного учреждения
средняя общеобразовательная школа с. 1-е Иткулово имени Б. Юлыева

Килешелде :

Тәрбиәүи эш буйынса

директор урынбаҫары

__________Азаматова Ә.Ә

Раҫланды :

Мәктәп директоры вазифаһын башҡарыусы

__________Кутусова Г.Д

Приказ № 190 02.09 2024

# Комплекслы – тематик план

| Тема | Үткәреү ваҡыты | Эш йөкмәткеһе | Ойоштороу формалары | Йомғаҡлау саралары |
|---|---|---|---|---|
| Белем илендә | 2-13 сентябрь | Балаларҙа танып белеү теләге, мәктәпкә, китапҡа ҡыҙыҡһыныу үҫтереү. Балалар араһында берҙәмлек, дуҫлыҡ тойғолары формалаштырыу.Балалар баҡсаһы һәм уны уратаып алған йәмғиәттең социаль объекттары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларҙың иғтибарын яңы уҡыу йылындағы үҙгәрештәргә йүнәлтеү. Һөнәрҙәр тураһындағы бкүҙаллауҙарын киңәйтеү (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, музыка етәксеһе, урам һепереүсе, ашнаҡсы һ. б). | - Сюжетлы уйын "Мәктәп"<br>- Дидактик уйын "Нимә кәрәк?" | "Белем илендә" байрам кисәһе. (байрамды балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре әҙерләй. Балалар ярыштарҙа, викториналарҙа ҡатнаша. Һәләттәрен күрһәтә) |
| Диагностика | 2 -16 сентябрь | Балаларҙың белем кимәле диагностикаһын үткәреү. Төрлә баһалау критерийҙары аша белем һәр баланың кимәлен билдәләү. | Бөтә төр ойоштороу формаларын ҡулланыу | Диагностика картаһын тултырыу |
| Сөмбөлә килде беҙгә | 18- 29 сентябрь | Көҙ тураһында күҙаллауҙарын киңәйтеү, тәрәнәйтеү. Тере һәм тере булмаған тәбиғәтәге күренештәрҙең ябай бәйләнешен аңлатыу (һыуынғас – күбәләктәр юҡ була) һ. б. сезонлы күҙәтеүҙәр алып барыу. Ауыл хужалығы һөнәрҙәре тураһында күҙаллауҙарын | - шиғырҙар ятлау;<br>- һанамыштар, әйтемдәр өйрәнеү;<br>- дидактик уйындар :"Был ниндәй миҙгел?";<br>"Нимә үҙгәрҙе?", | "Көҙһылыу килде беҙгә" байрам иртәлеге.<br>"Көҙ килде" һүрәттәр күргәҙмәһе |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | киңәйтеү. Йәшелсә - емештәр тураһында бедемләрен арттырыу. Тәбиғәттәге хәүефһеҙлек һаҡлау ҡағиҙәләре тураһында күҙаллауҙарын үҫтереү. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Ябай экологик үҙ – аң формалаштырыу. | “айырмаһын әйт”<br>- фотоһүрәттәр ҡарау;<br>- экскурсиялар;<br>- - күҙәтеүҙәр | |
| Башҡортостаным илем | 2- 13<br><br>октябрь | Балаға “бәләкәй Тыуған ил” төшөнсәһен һеңдереү: Ул уның ата- әсәһе менән йәшәгән өйө, ҡалаһы. Улар – Башҡортостан Республикаһының бер өлөшөн, киҫәген тшкил итеүен аңлатыу. Башҡортостанда йәшәгән халыҡтар, уларҙың теле, мәҙәниәте тураһында башланғыс төшөнсә биреү.Башҡортостандың ҙур ҡалалары: Өфө, Стәрлетамаҡ, Сибай, Салауат һ. б. менән таныштырыу.Ҡалала йөрөү ҡағиҙәләре менән т аныштырыу. ӨҠаланың йәмғиәт бинаралы менән таныштырыу. Төрлө һөнәрҙәр менән таныштырыуҙы дауам итеү. Бер нисә билдәле шәхестәр менән таныштырыу. | - һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>Дидактик уйындар “Флаг төҙө”, “Ҡырҡылған һүрәттәр” һ.б.<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- тыуған ил тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- музыкаль әҫәрҙәр | Республика көнөнә тематик музыка дәресе үткәреү |
| Беҙ Рәсәйҙә йәшәйбеҙ | 16 – 31 октябрь | Рәсәй тураһында тәүге белемдәр биреү. Рәсәй илендә йәшәгән халыҡтарға ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү. Рәсәй иленеҢ тәбиғәте тураһында күҙаллауҙарын үҫтереү. Президент тураһында тәүге белемдәр биреү. Ҡалала һәм ауылдарҙа | - күҙәтеүҙәр,<br>- тыуған ил тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- һүрәттәр ҡарау; | Спорт сараһы “Беҙ йәш Рәсйәселәр” |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | йәшәүсе кешеләрҙең һөнәрҙәре тураһында элементар күҙаллауҙарын киңәйтеү. Рәсәйҙең билдәле шәхестәре менән танышыу. | - әңгәмә, | |
| Халыҡтар дуҫлығы | 1 – 7 ноябрь | Илебеҙҙә йәшәүсе бер нисә милләт тураһында белемдәр биреү. Милләттәрҙең дуҫ йәшәүе тураһында күҙаллауҙарын киңәйтеү. Илебеҙҙә йәшәүсе төрлө милләт халҡына, вәкилдәренә ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү. Дуҫлыҡ һәйкәле менән таныштырыу. | - әңгәмә,<br>- фотоһүрәттәр ҡарау,<br>- төрлө милләттәр дуҫлығы тураһында әйтемдәр, мәҡәлдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт | Дуҫлыҡ тураһында викторина Ата-әсәләр менән берлектә |
| Икмәк дәүләт байлығы | 7- 11 ноябрь | Икмәк тураһында белемдәрен киңәйтеү. Икмәктең өҫтәләг килеп ултырыу юлын өйрәнеү. Комбайнер, икмәк бешереүсе һ. б. ауыл хужалығы һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ауыл эшсәндәренең хеҙмәтен хөрмәт итеү. Икмәктең төрҙәре тураһында күҙаллауҙарын арттырыуы. Икмәкте ҡәҙер итергә өйрәтеү. | һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>Дидактик уйындар<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- әсәйҙәр тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- музыкаль әҫәрҙәр,<br>халыҡ ижады | “Икмәк беҙгә ҡайҙан килгән?” дөйөмләштереү дәресе |
| Тормош һабаҡтары | 13– 24 ноябрь | Өләсәйҙәр, ата- бабаларҙан ғөрөф – ғәҙәттәре, уларҙың бөгөнгө көнгә килеп еткән һабаҡтарын өйрәнеү теләген тыуҙырыу. Ололарға ихтирам менән ҡарау. Уларҙың изге һабаҡтарын үҙләштереү теләге тыуҙырыу. | һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>Дидактик уйындар<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- т мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт, | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | - музыкаль әҫәрҙәр | |
| | | | | |
| Әсә күңеле балала,<br>Бала күңле далала | 24 – 30 ноябрь | Әсәй, әсә һөйөүе тураһында белемдәрен арттырыу. Әсәйҙәргә һөйөү тәрбиәләү. Әсәйҙәргә бүләк әҙерләүгә йәлеп итеү.Ғаилә тураһындағы күҙаллауҙарын формалаштырыу. Ғаилә - бала менән бергә йәшәүсе кешеләр булыуын аңлатыу. | һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>Дидактик уйындар<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- әсәйҙәр тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- музыкаль әҫәрҙәр | Тематик дәрес “Әсәйем ҡәҙерлем” |
| Гәлсәр ҡыш | 1-8 декабрь | Балаларҙың ҡыш тураһындағы күҙаллауҙарын үҫтереү. Ябай бәйләнештәр таба белеүҙе нығытыу. Миҙгел менән бәйле күҙәтеүҙәр үткәрә белеүҙе үҫтереү. Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таншытырыу. Ҡыш көнө хәүефһеҙлек һаҡлау саралары менән танышыу. Мәтдәләрҙең бер хәлдән икенсегә күсеүен тәжрибәләр аша нығытыу. Һыу һәм боҙ менән тәжрибәләр үткәргәндә ижадилыҡ һәм ҡыҙыҡһыныу формалаштырыу. Ҡар һәм боҙҙоң үҙенсәлектәре менән таныштырыу. Һәр ваҡыт ҡыш булған урындар, һәм Арктика, Антарктидала йәшәгән хайуандар тураһында белемдәрен тулыландырыу. | һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>Дидактик уйындар “Ниндәй миҙгел”, “Ҡырҡылған һүрәттәр” һ.б.<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- миҙгелдәр тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- музыкаль әҫәрҙәрҙәр, йырҙар йрәнеү | Дөйөмләштереү дәресе “Гәлсәр ҡыш” |
| Беҙҙең хоҡуҡтар | 11- 15 | Балалаҙы хоҡуҡтары менән таныштырыу. | - әңгәмә, | “Ниндәй |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | декабрь | Хоҡуҡ төшөнсәһен аңлатыу. Балалр баҡсаһының үҙенең талаптары булыуын аңлатыу. Ябай ғына хоҡуҡ һаҡлау ҡағиҙәләре менән таныштырыу. Ябай мораль нормаларҙы үтәүҙе формалаштырыу. Бер – береһе менән яҡшы мөнәсәбәттә булырға өндәү. | - нәфис әҙәбиәт укыу,<br>- дидактик уйындар “Нимә дөрөҫ”, “Хатаһын тап” | хоҡуҡтарыңды беләһең?” йомғаҡлау дәресе |
| Хуш киләһең Яңы йыл | 18-29 декабрь | Яңы йыл менән бәйле бөтә төр эшмәкәрлектәр ойоштороу (уйын, аралашыу, хеҙмәт, танып – белеү, художестволы – продуктив, музыкаль, нәфис әҙбиәт) | һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>- Ҡырҡылған һүрәттәр ,<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- яңы йыл тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- музыкаль әҫәрҙәр | Яңы йыл иртәлеге<br><br>“Яңы йыл килде беҙгә “ата-әсәләрҙең стена гәзите конкурсы |
| Китап - белем шишмәһе | 9 – 19 Ғинуар | Китап – белем шишмәһе төшөнсәһен аңлатыу. Китапҡа, белем биреү нигеҙенә ихтибарлы ҡараш тәрбиәләү. Боҙолған китаптарҙы йүнәтеүгә йәлеп итеү. Яңы китаптар менән таныштырыу. Китап менән бәйле халыҡ – тел ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү Китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Китап ҡарағанда уны биҙәгән рәссамдар менән танышыу. | - китап күргәҙмәһе,<br>- әңгәмәләр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- әйтемдәр, мәҡәлдәр , йомаҡтар сисеү | “Нәфис һүҙ оҫтаһы” төркөм ара конкурс. |
| Башҡорт халыҡ | 22 – 31 | Бшҡорт халыҡ йолалары тураһындағы | - әңгәмәләр, | Фольклор |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| йолалары | ғинуар | төшөнсәләрҙе нығытыу. Халыҡ көнкүреш, кәсептәре менән таныштырыу. Халыҡтың ауыҙ - тел ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балалар менән эштә фольклорҙы киң ҡулланыу. | - нәфис әҙәбиәт,<br>- әйтемдәр, мәҡәлдәр ,<br>йомаҡтар сисеү,<br>- һүрәт ҡарау | байрамы |
| Теле барҙың – иле бар | 1 – 9<br>февраль | Ата-әсәһенең милләте буйынса үҙенең милли сығышы менән таныштырыу. Башҡорт халҡының үткәне, теле, арҙаҡлы кешеләре тураһында тәүге мәғлүмәттәрҙе биреү. Баланы ошо милләттең бер вәкиле, уны дауам итеүсе икәнлеген аңлатыу. Тыуған тел төшөнсәһен киңәйтеү. | һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>- дидактик уйындар<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- тыуған ил тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- музыкаль әҫәрҙәр | Ғаиләләр ярышы “Минең тыуған илем” |
| Беҙҙең армия | 12 – 22<br>февраль | Балаларҙы хәрби һөнәрҙәр (һалдат, танкист, осойсы, диңгеҙҙә йөҙөүсе, сик һаҡсыһы), хәрби техника (самолет, танк, хәрби крейсер), Рәсәй флагы менән таныштырыу. Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. Хәрби һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу үҫтереү. Илебеҙ һаҡсыларына ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү. | һүрәттәр ҡарау;<br>- әңгәмә,<br>- дидактик уйындар “Флаг төҙө”, “Ҡырҡылған һүрәттәр” һ.б.<br>- күҙәтеүҙәр,<br>- экскурсия,<br>- тыуған ил тураһында мәҡәл, әйтемдәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- музыкаль әҫәрҙәр, | Байрам иртәлеге |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | -йырҙар өйрәнеү | |
| Гендер тәрбиәһе (малайҙарҙы тәрбиәләү) | 26 – 29 февраль | Гендер тәрбиәһе биреү ( малайҙарҙа көслө, сос, етеҙ, ил һаҡсылары булыу теләгән формалаштарыу. Ҡыҙҙарға малайҙарға ҡарата ихтирамлыҡ, киләсәк быуын ил һаҡсыларына булған ҡараш тәрбиәләү).Халыҡ тарихын менән таныштырыу. Билдәле батырҙар менән таныштырыу. | - әңгәмәләр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- әйтемдәр, мәҡәлдәр , йомаҡтар сисеү,<br>- һүрәт ҡарау, | Малайҙар араһында ярыш үткәреү |
| Ил биҙәге – ҡатын ҡыҙ | 4 – 15 март | Ғаиләгә, әсәйгә, өләсәйгә һөйөү менән бәйле бөтә төр балалар эшмәкәрлеген ойоштороу (уйын, аралашыу, хеҙмәт, танып – белеү, художестволы – продуктив, музыкаль, нәфис әҙбиәт). Тәрбиәселәргә ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү.<br>Гендер тәрбиәне киңәйтеү. Балаларҙы әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә, тәрбиәселәренә бүләк әҙерләүгә йәлеп итеү. | - күҙәтеүҙәр,<br>- әңгәмәләр,<br>- һүрәт ҡарау,<br>- дәрестәр,<br>- әсәйҙәр тураһында әйтемдәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар,<br>- нәфис әҙәбиәт | Әсәйҙәр көнөнә иртәлек |
| Яҙ килә. Хуш киләһең Науруз. | 18 – 29 март | Миҙгел билдәләрен асыҡлауҙы камиллаштырыу. Яҙ тураһында күҙалауҙарын киңәйтеү. Тәбиғәттә булған үҙгәрештәрҙең ябай ғына бәйләнештәрен таба белеү. Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен күҙаллауҙы киңәйтеү. Тәбиғәткә ихтибарлы ҡараш тәрбиәләү. Элементар экологик күҙаллауҙарҙы | - күҙәтеүҙәр,<br>- әңгәмәләр,<br>- һүрәт ҡарау,<br>- дәрестәр,<br>- миҙгел тураһында әйтемдәр, мәҡәлдәр, | “Нәүрүз”байрамы |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | формалаштырыу. Яҙ көнө үткәрелгән эштәр, баҡсалағы, яландағы эштәр тураһында күҙаллауҙарын формалаштырыу. Баҡсала, сәскә түтәлдәрендәге ябай ғына көстәре еткән эштәргә йәлеп итеү. | йомаҡтар,<br>- дидактик уйындар “Ниндәй миҙгел?”,<br>- “Айырмаһын тап” һ. б. | |
| Һаулыҡ – ҙур байлыҡ | 1 – 5 апрель | Кешенең һаулығы тураһында мәғлүмәттәр биреү. Кәүҙә һәм һиҙеү ағзаларының тирә- йүнде, ысынбарлыҡты аңлау һәм өйрәнеүҙәге роле тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Ҡул көсө меән эшләй торған эштәр, күҙ, ҡолаҡ, танау аша әйберҙәрҙе таныу, һөйләшкәндә ауыҙ, тел, тештәр башҡарған роль тураһында аңлатма биреү. Тән тиреһе тураһында төшөнсә биреү. Элементар гигиена ҡағиҙәләрен үтәү. | - дидактик уйындар,<br>- әңгәмәләр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- әйтемдәр,<br>- телтөҙәткестәр,<br>- китаптар ҡарау,<br>- фотоһүрәттәр ҡарау,<br>- сюжетлы һөйләү, | “Һыу беҙҙең байлығыбыҙ” күңел асыу сараһы. |
| Беҙ буласаҡ Йыһангирҙәр | 8 -12 апрель | Йыһан төшөнсәһе менән таныштырыуҙы дауам итеү. Йыһангирҙәр тураһында күҙаллауҙарын формалаштырыу. Балаға күк есемдәре (ҡояш, ай, йондоҙҙар) һә башҡа күренештәр тураһында аңлатыуҙы дауам итеү (ҡояш ҡалҡыу, байыу, таң атыу, йондоҙ атылыу һ. б.). Ҡояштың ер йөҙөндә яҡтылыҡ, йылылыҡ биреүе һә тормош сығанағы булып тороуы хаҡында аңлатыу. | - күҙәтеүҙәр,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>- хәрәкәтле уйындар,<br>- һүрәттәр ҡарау,<br>- күргәҙмә ойоштороу,<br>- әңгәмә | Тематик дәрес Күргәҙмә “Мин йыһанды нисек күрәм” |
| Ер беҙҙең уртаҡ йортобоҙ | 15 – 30 апрель | Ерҙең тәп йәшәү урыны булыуын аңлатыу. Кешенең Ерҙә йәшәгән башҡа йән эйәләренән айырылып тороуын төшөндөрөү (ул фекерләй, аңлай белә, һәр эште алдан уйлай һ. б.). | - күҙәтеүҙәр,<br>- әңгәмә,<br>- дәрестәр,<br>- схемаһүрәттәр | “Мин ерҙә йәшәйем” күңел асыу сараһы |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | менән эшләү,<br>- нәфис әҙәбиәт | |
| | | | - | |
| Еңеү яҙы | 1 – 8 май | Патриотик тәрбиә биреү. Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. Еңеү көнөнә арналған байрам тураһында күҙаллауҙарын формалаштырыу.<br>Һуғыш ветерандарына ихтирамлыҡ тәрбиәләү. | - күҙәтеүҙәр,<br>- әңгәмә,<br>- дәрестәр,<br>- ветеранды саҡырыу,<br>- нәфис әҙәбиәт | Мәңгелек утҡа экскурсия |
| Музей донъяһы | 13 – 17 май | Музей төшөнмсәһе менән таныштырыу. Музейҙа халыҡ ҡомартҡылары һаҡланыуын аңлатыу. Музейҙарҙың төрҙәре менән таныштырыу. Ата-әсәләр менән берлектә мини музей төҙөү һәм уны тулыландырыу. | - балалар баҡсаһы музейына экскурсия,<br>- фотоһүрәттәр ҡарау,<br>- нәфис әҙәбиәт,<br>-әңгәмә,<br>- күҙәтеүҙәр | Музейгә экскурсия Төркөмдә мини музей ойоштороу. |
| Салауат батыр рухы | 20 – 27 май | Салауат Юлаев менән таныштырыу. Уның батырлығы тураһында ябай мәғлүмәттәр биреү. Балаларҙа халыҡ батырҙарына ихтирам тәрбиәләү. Малайҙарға батыр булып үҫеү өсөн ниндәй булырға кәрәк темаһын аңлатыу. | - халыҡ уйындары,<br>- фотоһүрәттәр ҡарау,<br>- нәфис әҙәбиәт<br>- дидактик уйындар,<br>- әңгәмәләр,<br>- “батырҙар “бейеүен өйрәнеү | “Салауат батыр” беҙҙең менән күңел асыу сараһы. |
| Диагностика | 20 – 30 май | Балаларҙың белем кимәле диагностикаһын үткәреү. Төрлә баһалау критерийҙары аша белем һәр баланың кимәлен билдәләү. | Бөтә төр ойоштороу формаларын ҡулланыу | Диагностика картаһын тултырыу |

**Муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы**
**1 –се Эткол ауылының Б. Юлыев исемендәге урта дөйөм белем биреү мәктәбенең филиалы Ҡаратал ауылының мәктәпкәсә белем биреү төркөмө**

**Муниципального района Баймакский район**
**и г. Баймак группа дошкольного образования д. Каратал**
**филиал муниципального общеобразовательного бюджетного учреждения**
**средняя общеобразовательная школа с. 1-е Иткулово имени Б. Юлыева**

Килешелде :

Тәрбиәүи эш буйынса

директор урынбаҫары

__________Азаматова Ә.Ә

Раҫланды :

Мәктәп директоры вазифаһын башҡарыусы

_____________Кутусова Г.Д

Приказ № ______ ____________2024

# Перспектив план

## Саф һауала йөрөү

| Ай | Танып белеү өлкәһе | | Коммуникация өлкәһе | Социалләштереү Һаулыҡ өлкәләре | Хеҙмәт өлкәһе |
|---|---|---|---|---|---|
| | күҙәтеүҙәр | Эҙләнеү – тикшеренеү эштәре | Дидактик уйындар | Хәрәкәтле уйындар, уйын – күңел асыуҙар, халыҡ уйындары | |
| **Сентябрь** | *Тере тәбиғәт:*<br>- түтәлдәге сәскәләр;<br>- япраҡтарҙың төҫтәре үҙгәреүе;<br>- ҡайын;<br>-үҫемлектәрҙең төрлөлөгө;<br>-үләндәр һәм ағастар;<br>-саған һәм ҡайын япрағы;<br>-эттте күҙәтеү;<br>- бөжәктәр<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- тәбиғәттәге сезонлы үҙгәрештәр<br>- һауа торошо | ➢ Һауаның хәрәкәте<br>➢ Һауа торошона ҡарап тупраҡтың йылыныуы һыуыныуы.<br>➢ Ҡомдоң үҙенсәлеге | “хатаһын тап”, “Һүҙ менән иҫбат ит”, “Былай буламы әллә юҡмы?”, “Ниндәй миҙгел?”, “Ҡайҙа нимә эшләргә була?“ , “Һөйләмде дауам ит”, “Ҡоштар һәм бесәй”, “Нимәнең япрағы”, “Мин кем?”,”Кем оса?”, “Ниндәй бөжәк?” | “тыныс ҡына йүгереп үт”, “бесәй – сысҡан”, “Самолеттар”, “Өкө”, “Өйһөҙ ҡуян”, “Төлкө тауыҡ кетәгендә” , “ҡуяндар һәм бүре”, “Кем флагҡа алдараҡ килә?”, “Тотолма!”, “Әйтелгән ағасҡа йүгер”, “кем тиҙерәк йыйып алыр”, “Ҡатып ҡал”, “Һикереү”, “Ҡуңыҙар” | Майҙансыҡта кипкән япраҡтарҙы һәм сүп – сарҙы йыйыу.<br>Түтәлдәорҙә кипкән сәскә ботаҡтарын алыу.<br>Йәшелсә түтәлдәрендә кипкән ботаҡтарын, һабаҡтарын йыйып алыу |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Октябрь** | *Тере тәбиғәт:*<br>- япраҡ ҡойолғанын һәм төрлө төҫтәге япраҡтар;<br>- үҫемлектәрҙең үҫешендәге үҙгәрештәр;<br>- тәбиғәттең матурлығы;<br>- көҙҙөң билдәләре;<br>- ҡоштар һәм ҡошсоҡтар;<br>- күгәрсендәр;<br>- өлкәндәрҙең хеҙмәте.<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- тәбиғәттәге сезонлы үҙгәрештәр;<br>- тәбиғәт күренештәре:<br>- тәбиғәттең матурлығы;<br>- кешеләрҙең кейеме.<br>Елдә һынып төшкән ботаҡтарҙы, япраҡтарҙыы ҡарау. | ➢ Һауа торошона ҡарап тупраҡтың йылыныуы һыуыныуы.<br>➢ Еүеш ҡомдоң үҙенсәлеге,<br>➢ Һауаның хәрәкәте<br>➢ Ҡояш нурҙарының үҙенсәлеге | “Ағастағы кеүек япраҡты тап”, “Өсөнсө артыҡ”,” “Нимә ниндәй була?”, “Эйе – юҡ”, “була – булмай”, “Ярҙам ит”, “шиғырҙы иҫләйһеңме?”, “беләһеңме?”, “был ҡайсаҡ була?”, Кемдә ниндәй төҫ?”, “Кем ниндәй һөнәр һайлар ине?”, “Йәйме – көҙмө?”,Йомаҡ һойоу уйыны”, “Кем тиҙерәк йыя”, “Был ниндәй бөжәк?”, “Иғтибарлы бул”, “Кемгә нимә кәрәк?” | “Тупты баҫтыр”, “Самолеттар”, “Өйһөҙ ҡуян”, “тәбиғәттә нимә үҙгәргән?”, “Ҡыңғырауҙар менән йәшенмәк”, “Ҡатып ҡал”, “Ҡомһоҙ бесәй”, “турғайҙар”, “Ҡуңыҙҙар”, “Бал ҡорто менән ҡарлуғас”, “Ҡояш ҡуяндар”, “Ҡуяндарға һунар”, “Япраҡты тап”, “Төлкө һәм тауыҡтар”, “Ҡыйыҡ башында бесәй”, “Нимә күрҙек әйтмәйбеҙ, нимә эшләнек күрһәтәбеҙ”, “Ҡусҡар”, “Ашнаҡсы”, “Сиңерткә йыры”, “Ҙур туп”, “Туп өҫкә”, “Тап һәм йүгер”, “Төлкө һәм тауаҡтар” | Сүп сар йыйыу, майҙансыҡтағы япраҡтарҙы йыйыу. Урам таҙартыусыға ҡойолған япраҡтарҙы йыйыуҙа ярҙам итеү.<br>Кескәйҙәргә япраҡ йыйырға ярҙам итеү |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Ноябрь** | *Тере тәбиғәт:*<br>- япраҡ ҡойолғанын һәм төрлө төҫтәге япраҡтар;<br>- тәбиғәттең матурлығы;<br>- ҡайын;<br>- ҡоштар (турғайҙар, ҡарғалар) һәм уларҙың тағараҡ янында ҡылыҡтары;<br>Тағараҡтар элеү<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- көндөң оҙонлоғо;<br>- тәбиғәт күренештәре:<br>- һауа торошондағы үҙгәрештәр;<br>- һыуыҡ көндә ерҙең туңыуы;<br>- тәбиғәттәге көҙгө үҙгәрештәр.<br>Төрлө юрауҙарға ҡарап һауа торошон билдәләү.<br>Тәбимғәттәге бөтә нәмәнең бәйлелеге | ➢ Һауа торшона ҡарап ҡарҙың иреүе.<br>➢ Боҙҙоң нәҙеклеге.<br>➢ Ҡар һәм боҙ – һыу. Температураға ҡарап уларҙың үҙгәреүе. | “был ҡайсаҡ була?”, “быны ҡасан эшләйһең?”,<br>“хатаһын тап”, “Һүҙҙе айырып әйт”, “Һүҙҙе иҫбат ит”, “Нимәнең япрағы”, Былай буламы, юҡмы?”, “Яуабын тап”, Йәйме әллә көҙмө?”, “Нимә ҡайҙа ята”, “Балыҡ, ҡош, йәнлек”, “Була – булмай”, “тәбиғәткә ни булған”, “йәнлектәр нимә эшләй?”, “Йәнлектәр нимә эшләй белә”, “Кем (нимә) оса”, “Өсөнсө артыҡ (үҫемлектәр”, “икенсе һүҙ тап”. | “Ҡояш ҡуян”, “, “шар”, “бесәй ҡыйыҡ башында”, “Ҡомһоҙ бесәй”, , “Ҡусҡар”, “Ҡыңғырау менән йәшенмәк”, “Ап- аҡ ҡуян ултыра”, “Йылға аша”, “Тупты өҫкә ташла”, “Бел һәм баҫтыр”, “Ҡуяндар һәм айыу”, “бал ҡорттары һәм ҡарлуғас”, “Һунарсы һәм ҡуяндар”, “турғайҙар һәм бесәй”, “Самолеттар”, “Ҡошсоҡтар һәм бесәй”, “Айыу – бүре”, “Үҙеңдең өйөңдө тап”, “Ҡуяндар һәм бүре”, “Осар ҡоштар”,” Төлкө тауыҡ һарайында”, “Баҫтырыш, кем таҫманы алыр”, “ Әйтелгән ағасҡа йүгер”, “балалар һәм бүре” | Сүп сар йыйыу, майҙансыҡтағы япраҡтарҙы йыйыу. Урам таҙартыусыға ҡойолған япраҡтарҙы йыйыуҙа ярҙам итеү.<br>Кескәйҙәргә япраҡ йыйырға ярҙам итеү |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Декабрь** | *Тере тәбиғәт:*<br>- ҡар аҫтындағы ағастар һәм ҡыуаҡтар<br>- ҡоштар (турғайҙар, ҡарғалар) һәм уларҙың тағараҡ янында ҡылыҡтары;<br>- ҡышлаусы ҡоштар,<br>- ҡайын һәм саған, тирәк һәм шыршы Тағараҡтар элеү<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- ҡышҡы кистәге күк йөҙө,<br>- ҡояш;<br>- ел;<br>- боҙ һәм ҡар бөттөктәре<br>- ҡышҡы матурлыҡ<br>- һауа торошо.<br>Боҙ һәм ҡарҙы сағыштырыу | ➢ Елдең йүнәлешен һәм көсөн билдәләү<br>➢ Боҙ менән тәжрибә<br>➢ Ҡар һәм боҙ – һыу. Температураға ҡарап уларҙың үҙгәреүе.<br>➢ Температура менән яҡтылыҡтың бәйләнеше<br>➢ Ҡарҙың һаҡлау үҙенсәлеге | “хатаһын тап”. “Һүҙҙе айырыа әйт”<br>“Иҫбат ит”, “ниндәй миҙгел?”, “Оҡшаш һүҙ тап”, “Кем күберәк хәрәкәт һүҙҙәрен әйтә?”<br>“Кайҙа нимә эшләргә мөмкин?”,”Һөйләмде дауам ит”,<br>“ Йәнлектәр нимә эшләй белә?”, “Кем күберәк иҫләр”, ”Икенсе һүҙ уйла”, “Нимә тураһында әйттем?”, “тағы нимә тураһында әйтергә була?”, “Был ни хәл”, “Үҙең уйла”, “Был ниндәй ҡош”, “Өсөнсө артыҡ”, “Иғтибарлы бул” | “ыныс ҡына йүгереп үт”, “Бесәй һәм сысҡандар”, “төҫлө автомобилдәр”, “Өйһөҙ ҡуян”, “Ҡоштар һәм бесәй”, “ баҫҡынсылар”, “Ҡартуфтар”, “Самолеттар”, “йәнлектәр”, “Баҫтырыш”, “парыңды тап”, “Ҡошсоҡтар һәм автомобиль”, “балалар һәм бүре”, “Баҡалар”, “Кусҡарҙар”, “Сысҡан тотош”, “турғайҙар”, “Ҡыңғырау менән йәшенмәк уйыны”, “Ҡулың менән теймәй генә йүгереп үт”, “Өйрәк һәм бәпкәләре”, “төлкө һәм тауыҡтар”, “Ҡуян һәм айыуҙар”<br>*Ҡышҡы уйындар:*<br>“Түңәрәккә а ташла”, “ Һаҡ бул, туңдырам” | Юлдарҙы таҙартыуҙа урам һепереүсегә ярҙам итеү. Майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу. Тағараҡтарға ем һалыу, уларҙы ҡарҙан таҙартыу.. Ағас төптәренә ҡар һалып сығыу. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Ғинуар** | *Тере тәбиғәт:*<br>- ҡар яуған ваҡытта ағастар;<br>- тереклек донъяһы: эттәр, турғайҙар, ҡарабашлы турғай, һайыҫҡан,<br>- бесәй һәм эттең эҙҙәрен сағыштырыу<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- ҡар,<br>- ҡышҡы күк йөҙө;<br>- ел; буран, көрттәр<br>- буран ваҡытындағы ҡарҙың үҙенсәлектәре<br>- һауа торошо.<br>Ерҙең ҡатлауын ҡарау | ➢ Ҡарҙың иреүе<br>➢ Ҡарҙың үҙенсәлектәре<br>➢ Боҙ – ҡаты һыу | “Хатаһын тап”, “Өсөнсө артыҡ” “һүҙҙәрҙе айыр”, “Иғтибарлы бул”, “Ҡайҙа нимә ята”, “Кем (нимә) оса?”, “Үҙең уйла”, “Был ниндәй ҡош”, “Уйлап тап”, “Былай була аламы?”, “Был турала шиғыр иҫеңә төшөр”, “Йомаҡ ҡойоу”,”Кем нимә ашай?”, “Сәйәхәт”, “Һүҙ менән әйт”, “Ҡышмы әллә көҙмө?”,”балыҡ, ҡош, йәнлек”, “Үҙеңдең шәүләңде баҫтырып ет”, “ағас артында йәшенмәк” | “Буш урын”, “Ҡуяндар һәм айыу”, “төлкө менән тауыҡтар”, “Үҙең бел һәм баҫтыр”, “Ялюбыр эт”, “Ҡыйыҡ башындағы бесәй”, “турғайҙар”, “Өкө”, “Самолеттар”, “Төлкө тауыҡ һарайында”, “Өйһөҙ ҡуян”, “Һунарсы һәм ҡуяндар”, “Тәлмәрйен”, “Ҡышлаусы ҡоштар”, “Повар”, “беҙ нимә күрҙек әйтмәйбеҙ…”, “Ҡомһоҙ бесәй”, “Ҡуян” | Юлдарҙы таҙартыуҙа урам һепереүсегә ярҙам итеү. Майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу. Тағараҡтарға ем һалыу, уларҙы ҡарҙан таҙартыу.. Ағас төптәренә ҡар һалып сығыу. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Февраль** | *Тере тәбиғәт:*<br>- ҡайындар;<br>- ҡоштар: ҡарабашлы турғай, һайыҫҡан,<br>*Ҡарау:*<br>- ҡышҡы ағастар, ағастарҙың олоно;<br>- ҡоштарҙың эҙҙәре<br>*Билдәләү:*<br>Һауа торошон төрлө билдәләре буйынса<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- ҡышҡы тәбиғәт күренештәре,<br>- ҡышҡы күк йөҙө;<br>- ел; буран, көрттәр<br>*Ҡарау:*<br>- боҙбармаҡтар, - ҡар өҫтөндәге эҙҙәр;<br>- кешеләрҙең кейемдәре | ➢ Ҡояш нурҙарының үҙенсәлеге:<br>➢ Ҡар һәм боҙ – һыу. Температураға ҡарап уларҙың үҙгәреүе.<br>➢ Елдең йүнәлешен билдәләү | “Хатаһын тап”, “Иғтибарлы бул”, “Ҡайҙа нимә ята”, “Кем (нимә) оса?”, “Үҙең уйла”, “Был ниндәй ҡош”, “Уйлап тап”, “Былай була аламы?”, “Был турала шиғыр иҫеңә төшөр”, “Йомаҡ ҡойоу”,”Кем нимә ашай?”, “Сәйәхәт”, “Һүҙ менән әйт”, “Ҡышмы әллә көҙмө?”,”балыҡ, ҡош, йәнлек”, “Үҙеңдең шәүләңде баҫтырып ет”, “ағас артында йәшенмәк”, “Үҙең уйла” | “Ҡуяндар һәм бүре”, “Өйһөҙ ҡуян”, “Тауыҡ кетәгендәге төлкө”, “Ҡоштар һәм бесәй”, “баҫтырыш”, “Балалар һәм бүре”, “парыңды тап”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Өкөләр”, “Йәшенмәк”, “Тәлмәрйендәр”, “Ҡыйыҡ башындағы бесәй”, “Ҡомһоҙ бесәй”, “Ҡыңғырау менән йәшенмәк”, “бал ҡорттары һәм ҡарлуғас”, “Ҡуяндар һәм айыуҙар”.<br><br>*Ҡышҡы уйындар:*<br>“ Һаҡ бул, туңдырам”, “Ҡарһылыуҙы тап”, “Ҡарәбей”, “Ҡар бөртөгө һәм ел” | Юлдарҙы таҙартыуҙа урам һепереүсегә ярҙам итеү.<br>Майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу.<br>Тағараҡтарға ем һалыу, уларҙы ҡарҙан таҙартыу.. Ағас төптәренә ҡар һалып сығыу. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Март** | *Тере тәбиғәт:*<br>- ҡоштар;<br>- бөжәктәр,<br>- тәбиғәттәге үҙгәрештәр<br>*Ҡарау:*<br>Үҫемлектәрҙе, ағастарҙы, ағастарҙың һәм ҡыуаҡтарҙың олонон; үләндәрҙе<br>- ҡоштарҙың эҙҙәре<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- тере булмаған тәбиғәт,<br>- тәбиғәттәге үҙгәрештәр;<br>- ел; болоттар, йырғанаҡтар<br>*Ҡарау:*<br>- боҙбармаҡтар,<br>- кешеләрҙең кейемдәре | ➢ Ҡарҙың тығыҙлығы<br>➢ Ҡар һәм боҙ – һыу. Температураға ҡарап уларҙың үҙгәреүе.<br>➢ Ҡарҙың иреүе,<br>➢ Тупраҡтың ҡарҙан әрселеп иреүе<br>➢ Һыуҙың формаһы юҡ<br>➢ Ҡомло конус | “Хатаһын тап”, “Өсөнсө артыҡ” “һүҙҙәрҙе айыр”, “Иғтибарлы бул”, “Ҡайҙа нимә ята”, “Кем (нимә) оса?”, “Үҙең уйла”, “Был ниндәй ҡош”, “Уйлап тап”, “Былай була аламы?”, “Был турала шиғыр иҫеңә төшөр”, “Йомаҡ ҡойоу”,”Кем нимә ашай?”, “Сәйәхәт”, “Ҡышмы әллә яҙмы?”,”балыҡ, ҡош, йәнлек”, “Үҙеңдең шәүләңде баҫтырып ет”, “ағас артында йәшенмәк”, “шаңдау”.”Хатаһын тап”, Йомаҡ ҡойоу”, “Һүҙ менән әйт”. | “тыныс йүгереп үт”, “балалар һәм бүре”, “бесәй – сысҡан”, “беҙ шаян балалар”, “төҫлө автомобиль”, “карусель”, “ “Бәләкәй генә аяҡтар йүгереп үткәндәр юлдан”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Өкөләр”, “Йәшенмәк”, “шар”“Тәлмәрйендәр”, “Ҡыйыҡ башындағы бесәй”, “Ҡомһоҙ бесәй”, “Билдәләнгән ағасҡа йүгер”, “Йылға аша сыҡ” | Майҙансыҡты ботаҡтарҙан, ҡыйҙарҙан, үткән йылдан ҡалған япраҡтарҙан таҙартыу. Юлдарҙы ипкә килтереү. Юлдарҙы таҙартыуҙа урам һепереүсегә ярҙам итеү. Ағас төптәрен йомшартыу. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Апрель** | *Тере тәбиғәт:*<br>*Ҡарау:*<br>Үҫемлектәрҙе, ағастарҙы, ағастарҙың һәм ҡыуаҡтарҙың олонон; үләндәр<br>Сәскә орлоҡтарын сәсеү<br>*Күҙәтеүҙәр:*<br>- ҡоштар;<br>- бөжәктәр,<br>- тәбиғәттәге үҙгәрештәр<br><br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- тәбиғәттәге үҙгәрештәр;<br>- ел; болоттар, йырғанаҡтар,<br>- һауа торошо | ➢ Ҡояш нурҙарында предметтарҙы киптереү<br>➢ Шаян корабликтар<br>➢ Һыуҙың үҙенсәлектәре | “наҙлы итеп әйт”, “был ҡайсаҡ була?”, “”йәнлектәр нимә эшләй белә?”, “икенсе һүҙ уйла”, “Нимә тураһында әйттем?”, “был нимә?”, “Үҙең уйла”, “сәбәбен тап”,<br>“Һүҙҙе билдәлә”, “ Айырмаһын тап”, “Тоҡта нимә?”, “Нимә тураһында һүҙ” | “Ҡояш һәм ямғыр”, “Тәлмәрйендәр”, “Шар”, “Сиңерткә йыры”,”Нимә күрҙек әйтмәйбеҙ”, “Бөжәктәр”, “Ҡомһоҙ бесәй”, “Тәлмәрйен һәм торна”, , Ҡуяндар”, “Ҡунарсы һәм ҡуяндар”, “Ҡыңғырау менән йәшенмәк”, “Йылға аша үт”, “Бал ҡорттары һәм ҡарлуғас”, “парыңды тап”, “Өйрәк һәм себештәре”, “Пожар”, “Ҡусҡар” | Сәскә түтәлдәрен сәскәләр сәсергә әҙерләү. Кескәйҙәргә майҙансыҡтарын таҙартышыу. Түтәлдәрҙе орлоҡтар һәм үҫентеләр сәсергә әҙерләү. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Май** | *Тере тәбиғәт:*<br>*Ҡарау:*<br>Үҫемлектәрҙе, ағастарҙың япраҡ ярыуын, ағастарҙың һәм ҡыуаҡтарҙың сәскә атыуын, яҙғы сәскәләр<br>*Күҙәтеүҙәр:*<br>- Бәпембәнең орлоҡтаы осоуын<br>- Сәскә атыусы үҫемлектәрҙе,<br>- Түтәлдәге үҫентеләр күренеүен,<br>- Бөжәктәр,<br>- Бесәйҙәр, ҡарлуғастар.<br>*Тере булмаған тәбиғәт:*<br>- ҡояш<br>- һауа торош | ➢ Һыулы ҡом<br>➢ Ҡағыҙ корабликтар<br>➢ Ҡояш нурҙарында предметтарҙы киптереү | “Ниндәй үҫемлек?”, “Кем (нимә) оса?”, “Сәйәхәт”, “Изге һүҙ”, “Өсөнсө артыҡ”, “Йомаҡ ҡойоу”, “”йәнлектәр нимә эшләй белә?”, “икенсе һүҙ уйла”, “Нимә тураһында әйттем?”, “был нимә?”, “Үҙең уйла”, “сәбәбен тап”, “Һүҙҙе билдәлә”, “ Айырмаһын тап”,, “Нимәнең япрағы”, “Үҙең уйлап тап” | “Тупты өҫкә ташла”, “Өйһөҙ бесәй”, “Ҡыйыҡ башындағы бесәй”, “Ҡәбеҫтә”, “Бал ҡорттары һәм ҡарлуғас”, “Турғайҙар”, “Бөжәктәр”, “Ҡомһоҙ бесәй”, “Тәлмәрйен һәм торна”, , Ҡуяндар”, “Ҡунарсы һәм ҡуяндар”, “Ҡыңғырау менән йәшенмәк”, “Йылға аша үт”,”Ҡоштар һәм бесәй”<br>*Уйын күңел асыуҙар:*<br>“Йәнлектәр”, “Кракодил”, “Ябай булмаған йәшенмәк” | Түтәлдәрҙе сүптәрҙән таҙартыу. Майҙансыҡтары таҙа тотоу. Юлдарҙы таҙартыуҙа урам һепереүсегә ярҙам итеү. |